Приложение №

МУНИЦИПАЛЬНОЕ КАЗЕННОЕ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ
ОСНОВНАЯ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ ШКОЛА д.АЙДАКАЕВО
МУНИЦИПАЛЬНОГО РАЙОНА БЕЛОКАТАЙСКИЙ РАЙОН РЕСПУБЛИКИ
БАШКОРТОСТАН

«Согласовано» Заместитель директора по УВР /Казыева Л.М./ «28» 08 2020 г.	**«Утверждено»** Директор школы / Хафизова Г.А. / «28» 2020г. Приказ N 74

МКОУ ООШ д. Айдакаево

РАБОЧАЯ ПРОГРАММА ПЕДАГОГА
ПО РОДНОМУ(БАШКИРСКОМУ) ЯЗЫКУ

1-4 КЛАССЫ

2020 год

Поянистельная записка

Настоящая программа по родному башкирскому языку для начальных классов создана на основе нормативных документов, обеспечивающих реализацию программы ФГОС:

1) Федерального государственного образовательного стандарта ООО (приказ Минобрнауки РФ от 17.12.2010 года № 1897);
2) Приказа Минобрнауки от 31.12.2015 г. № 1577 «О внесении изменений в федеральный государственный образовательный стандарт основного общего образования, утвержденный приказом Министерства образования и науки Российской Федерации от 17 декабря 2010 г. N 1897»

3) Приказа Минобрнауки «Об утверждении федеральных перечней учебников, рекомендованных (допущенных) к использованию в образовательном процессе в образовательных учреждениях, реализующих образовательные программы общего образования и имеющих государственную аккредитацию» (2013г,2014г.,2015.);
4) Приказа Минобрнауки от 21.04.2016г №459 «О внесении изменений федеральных перечней учебников, рекомендованных (допущенных) к использованию при реализации имеющих государственную аккредитацию образовательных программ начального общего, основного общего, среднего общего образования, утверждённый приказом Минобрнауки РФ от 31.03.2014г №253» в образовательных учреждениях, реализующих образовательные программы общего образования и имеющих государственную аккредитацию».
5) Примерной Основной образовательной программы ООО;
6) ООП НОО основного общего образования МКОУ ООШ д.Айдакаево (протокол №7 от 02.03.2020 г., приказ №19).
7) Учебного плана образовательного учреждения на текущий учебный год (протокол педсовета № 1 от 19.08.2020г.,приказ № 70).
8) Годового календарного графика образовательного учреждения на текущий учебный год (протокол №2 от 24.08.2020г., приказ№ 71).

Уҡытыу башҡорт телендә ойошторолған мәктәптәргә тәҡдим ителгән был уҡыу программаһы Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү буйынса икенсе быуын дәүләт стандарттары талаптарына, милли мәктәптәр өсөн эшкәртелгән уҡыу планына таянып ҡоролдо.

Башҡорт теленең уҡыу планындағы урыны.

Башҡорт теле буйынса сәғәттәр һаны 1-се кластарҙа: Грамотаға өйрәтеү17 сәғәт һәм «Башҡорт теле»- аҙнаға 1 сәғәттән 16 сәғәт. Бөтәһе йылына 33 сәғәт.,

2-4-се кластарҙа аҙнаһына1 дәрес , 34 аҙнанан һәр класта 34-шәр сәғәт.

Маҡсат:

Мәктәп алдында, шулай уҡ тел дәрестәрендә ҡуйылған иң төп маҡсат - баланы шәхес итеп үҫтереү.

Яңы стандарттар буйынса уҡыусыларҙа лингвистик (тел), аралашыу (коммуникатив), этнокультура өлкәһенә ҡараған (культурологик) компетентлыҡ булдырыу талап ителә.

Лингвистик компетентлыҡ (уҡыусыларҙың башҡорт теленән мәғлүмәтлелеге) өндәр һәм хәрефтәрҙе, һүҙьяһалышын, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе, һүҙ төркөмдәрен, һөйләм киҫәктәрен, лексик һәм грамматик берәмектәрҙе, лингвистик анализды һ. б. үҙ эсенә ала.

Аралашыу (коммуникатив) компетентлығы - уҡығанды һәм башҡалар һөйләгәнде аңлау, хәҙерге әҙәби башҡорт теленең нормаларына эйә булыу, һүҙ байлығын, телдең грамматик яғын дөрөҫ итеп үҙләштереү, телдән һәм яҙма формала бәйләнешле телмәр күнекмәләрен булдырыу һ. б.

Этнокультура өлкәһенә ҡараған (культурологик) компетентлыҡ, йәғни телде милли-мәҙәни юҫыҡта үҙләштереү - ул уҡыусыларҙың телгә өйрәнеү барышында милли үҙенсәлектәрҙе сағылдырған текстар менән эшләүе, халҡыбыҙҙың тормош- көнкүреш, йола, ғөрөф-ғәҙәт үҙенсәлектәрен, шанлы үткәнен, әҙәп-әхлаҡ нормаларын, телмәр әҙәплелеген, һынлы сәнғәт әҫәрҙәрен, мәҙәниәтен, халыҡ ауыҙ-тел ижады үрнәктәрен белеүе, башҡорт халҡының телмәр әҙәплелеген үҙләштереүе, рухи ҡомартҡыларын ихтирам итеүе һ. б.

Башланғыс мәктәптә башҡорт теле дәрестәрендә белем биреүҙең **төп бурыстары:**

- туған телдә камил һөйләшеү, фекереңде еткерә белеү, тел һәм телмәр күнекмәләрен тәрән үҙләштереүгә өлгәшеү;

- уҡыусыларҙың төрлө эшмәкәрлекте (уҡыу һәм белем алыу, хеҙмәт, аралашыу күнекмәләрен) үҙләштереүҙәренә ирешеү, универсаль уҡыу эш төрҙәренә өйрәтеү;

- башҡорт халҡының рухи мираҫын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү;

- дәреслек, өҫтәмә материал, һүҙлектәр, белешмә әҙәбиәт менән эш итеү күнекмәләрен камиллаштырыу;

- башҡорт телен башҡа фәндәр буйынса белем алыу сараһы булараҡ ҡулланырға әҙерләү;

- уҡыусыларҙың логик фекерләү һәләттәрен үҫтереү.

Башҡорт телен үҙләштереүҙең шәхси, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләре

Яңы стандарттарға ярашлы уҡыу сифатын өйрәнгәндә, йәғни тикшереү процесында, түбәндәге һөҙөмтәләр күҙаллана:
шәхси үҫеш кимәле;
метапредмет кимәле;
предмет буйынса белем кимәле.
Шәхси үҫеш кимәле. Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттарын тәрбиәләү. Уны үҙ аллы үҫешкә, камиллашыу оҫталығына өйрәтеү.Һөҙөмтәлә уҡымышлы, үҙ еренең, иленең, халҡының ҡиммәттәренә төшөнгән, уны һанлаған һәм һаҡлаған, яҡлаған социум итеп формалаштырыуға башланғыс нигеҙ һалыу.
Метапредмет кимәле. Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, ойоштороу һәм коммуникатив эшмәкәрлек, йәғни баланы үҙ аллы уҡырға, белем алырға өйрәтеү.
Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, шәхси, ойоштороу һәм коммуникатив эшмәкәрлек. Шәхси эшмәкәрлек баланы уҡымышлы һәм аңлы шәхес итеп үҫтереү. Эшмәкәрлекте уның тормош һәм кешелеклелек ҡиммәттәрен, әхлаҡи һәм мораль нормаларҙы аңлап ҡабул итеүеп, әйләнә-тирәләге күренештәргә һәм ваҡиғаларға шәхси ҡарашын формалаштырыуға йүнәлтеү.
Ойоштороу эшмәкәрлеге танып белеү процесы менән идара итеүҙе күҙ уңында тота: эшмәкәрлекте күҙаллау, планлашты рыу, башҡарыу, тикшереү, үҙгәрештәр индереү һәм баһалауҙы үҙ эсенә ала.
Танып белеү эшмәкәрлеге тейешле мәғлүмәтте эҙләп табыу һәм анализлауҙы, проблемаларҙы хәл итеү юлдарын эҙләүҙе һәм ҡулланыуҙы тәьмин итә.
Аралашыу эшмәкәрлеге белем алыу процесында аралашырға өйрәнеүҙе ойоштороуға йүнәлтелгән. Ул башҡа кешеләрҙе тыңлай белеү һәм аңлауҙы, мәғлүмәтте теүәл тапшырыуҙы үҙ эсенә ала.
Предмет кимәле. Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны эшкәртеү һәм ҡулланыу өлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.

1-**се класс**

Шәхси үҫеш кимәле
«Башҡорт теле» предметын үҙләштергәндә, уҡытыусы шәхси үҫеш кимәлен үҫтереү бурысын ҡуя:
-телдең һәм телмәрҙең кешеләр тормошондағы әһәмиәтен аңлау;
-тексты эмоциональ ҡабул итеү, үҙеңдең хис-тойғоларыңды белдереү;
-кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлау, уртаҡлашыу, бүлешеү;
-укылған әҫәрҙәрҙең геройҙарына һәм уларҙың эшенә ҡарата үҙеңдең мөнәсәбәтеңде белдереү.
Метапредмет кимәле
Ойоштороу эшмәкәрлеге:
-уҡытыусы ярҙамында әшмәкәрлек маҡсатын билдәләү;
-дәрестә эш барышын һөйләп барыу;
-дәреслек материалы менән эшләү барышында уйҙы, фаразды әйтеү;
-уҡытыусы тәҡдим иткән план буйынса эшләү;
-коллектив төҙөлгән план буйынса эшләү.
Танып белеү эшмәкәрлеге:
-дәреслектең, матур яҙыу өлгөләренең айышына төшөнөү (тышы, йөкмәткеһе, шартлы билдәләре);
-дәреслектән, текстан, иллюстрацияларҙан һорауға яуап табыу;
-бергәләп йәки үҙ аллы башҡарған эш буйынса һығымта яһай белеү;
- ҙур булмаған текстың йөкмәткеһен һөйләү.
Аралашыу эшмәкәрлеге:
-фекереңде телдән формалаштырыу;
-кешенең телмәрен тыңлау һәм аңлау;
-тыңлай белеүҙең уңышлы аралашыуға шарт булыуын үҙләштереү;
-тексты тасуири уҡыу һәм йөкмәткеһен һөйләү;
-уҡытыусы һәм класташтар менән берлектә тәртип ҡағиҙәләре һәм уларҙы үтәү тураһында килешеү.
Предмет үҙләштереү кимәле
-тексты һөйләмдәр теҙмәһенән айыра белеү;
-бөтөн һүҙҙәр менән аңлы, дөрөҫ уҡыу;
-тексты ентекле һөйләй белеү;
-хикәйә төҙөү;
-һүҙҙең өндәрен атау, ижеккә бүлеү, өндәр һәм хәрефтәр һанын билдәләү, дөрөҫ баҫым ҡуйыу, хәреф-өн анализы яһау;
-һөйләмде, кешенең исемен һәм фамилияһын баш хәреф менән яҙыу;
-һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙыу;
-баҫма тексты күсереп яҙыу, һүҙҙәрҙе һәм ҙур булмаған һөйләмдәрҙе диктант итеп яҙыу;
-тамырҙаш һүҙҙәрҙең тамырын табыу.

2-се класс
Шәхси үҫеш кимәле
-телдең һәм телмәрҙең кешеләр тормошондағы әһәмиәтен аңлау;
-тексты эмоциональ ҡабул итеү, үҙеңдең хис-тойғоларың менән бүлешеү;

-кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлау, уртаҡлашыу, бүлешеү;
-башҡа кешеләрҙең яҙма һәм һөйләү телмәренә иғтибар итеү (интонация, темп, тон, һүҙҙәр һәм тыныш билдәләренең ҡулланылышы һ. б.).
Был һөҙөмтәләргә ирешеүҙең сараһы булып дәреслектәге күнегеүҙәр тора.

Метапредмет кимәле

Ойоштороу эшмәкәрдеге:
-уҡытыусы ярҙамында эшмәкәрлек маҡсатын билдәләү;
-планлаштырыу;
-һөҙөмтәне һәм белемде үҙләштереү кимәлен күҙаллау;
-дәрестә эш барышын һөйләп аңлатып барыу;
-дәреслек материалы менән эшләү барышында фекер, фараз менән уртаҡлашыу;
-уҡытыусы тәҡдим иткән план буйынса эшләү;
-коллектив төҙөлгән план буйынса эшләү;
-тикшереү;
- төҙәтмәләр индереү;
- баһалау.

Танып белеү эшмәкәрлеге:
-дәреслектең, һүҙлектәрҙең, белешмәләрҙең айышына төшөнөү (йөкмәткеһе, шартлы билдәләре);
-дәреслектән, текстан, таблицаларҙан, схемаларҙан, иллюстрацияларҙан һорауға яуап табыу;
-күмәкләп йәки үҙ аллы башҡарған эш буйынса һығымта яһай белеү;
-ҙур булмаған текстың йөкмәткеһен һөйләү;
-бер төрлө информацияны икенсе төрлө формаға үҙгәртеү.

Аралашыу әшмәкәрлеге:
-үҙеңдең фекереңде телдән һәм яҙма рәүештә формалаштырыу;
-кешенең телмәрен тыңлау һәм аңлау, телмәрҙең темаһын, терәкһүҙҙәрен билдәләү;
-тексты тасуири уҡыу һәм йөкмәткеһен һөйләү;
-уҡытыусы һәм класташтар менән берлектә тәртип ҡағиҙәләре һәм уларҙы үтәү, аралашыу тураһында килешеү;
-парлап, төркөмләп эшләргә өйрәнеү, төрлө ролдәр үтәү (башҡарыусы йәки лидер).

Предмет үҙләштереү кимәле

-уҡытыусы йәки уҡыусыларҙың һөйләгән тексын ишетеп ҡабул итеү;
-тексты һөйләмдәр теҙмәһенән айыра белеү;
-бөтөн һүҙҙәр менән аңлы, дөрөҫ, тасуири уҡыу;
-текстың исемен (атамаһын) аңлау, тексҡа исем һайлап алыу йәки ҡушыу;
-тексты өлөштәргә бүлеү, һәр бүлеккә исем ҡушыу (план төҙөү);
-ентекле йәки һайланған өлөштөң йөкмәткеһен һөйләү;
- тексты ентекле һөйләй белеү;
-ҡыҫҡа хикәйә төҙөү;

-һүҙҙең өндәрен дөрөҫ атау, һүҙҙе ижеккә бүлеү, өндәр һәм хәрефтәр һанын билдәләү, дөрөҫ баҫым ҡуйыу, баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәрҙе табыу, телдән өн-хәреф анализы яһау;
-һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәләрен ҡуйыу;
-баҫма тексты дөрөҫ итеп күсереп яҙыу, яҙылғанды өлгө менән сағыштырып тикшереү;
-һүҙҙәрҙе һәм ҙур булмаған һөйләмдәрҙе, 30-40 һүҙҙән торған тексты диктант итеп яҙыу;
-һүҙҙәрҙең ауыр яҙылышлы урындарын күреү һәм дөрөҫ яҙыу;
-һөйләмде, кешенең исемен һәм фамилияһын, географик атамаларҙы, хайуан ҡушаматтарын баш хәреф менән яҙыу; нәҙеклек (ь) һәм ҡалынлыҡ (ъ) билдәләрен, йә, йө, йү, йе, йо, йы ҡушымсаларын дөрөҫ яҙыу;
- өйрәнелгән ҡағиҙәләргә хаталарҙы табып төҙәтеү;
-тамырҙаш һүҙҙәрҙең тамырын табыу, ялғауҙарҙы айыра белеү һәм билдәләү;
-һүҙҙәргә һорау ҡуйыу; кем? нимә? һорауына яуап биреүсе һүҙҙәрҙе
-күреү, һөйләмдә кем йәки нимә тураһында һүҙ барыуын асыҡлау;
-бирелгән һүҙҙәрҙән йәки тема буйынса һөйләмдәр төҙөү;
-картина йәки бирелгән тема буйынса ҙур булмаған текст төҙөү, уҡытыусы ярҙамында 4-5 һөйләмдән торған тексты дәфтәргә яҙыу.

3-сө класс

Шәхси үҫеш кимәле

-Башҡорт теленең матурлығын һәм тасуирлығын тоя белеү, телде ихтирам итеү;
-үҙ телеңде камиллаштырырға ынтылыу;
-тыуған ереңә, халҡыңа һәм милләтеңә ихтирамлы булыу;
- белем алыу менән ҡыҙыҡыныу;

Метапредмет кимәле

-дәрестең темаһын һәм маҡсатын уҡытыусы ярҙамында билдәләү;
-уҡытыусы мөнән бергә проблеманы хәл итеү планын төҙөү;
-план буйынса эшләү, эшеңде план менән сағыштырыу, төҙәтмәләр индереү;
-уҡытыусы менән диалог барышында баһалау үлсәме критерийҙар төҙөү,
-үҙеңдең һәм башҡаларҙың эшенең уңышлылығын ошо үлсәм ярҙамында тикшереү.
Танып белеү эшмәкәрлеге:
-текст мәғлүмәтенең бөтә төрҙәрен уҡыу (текстың үҙен, текстан һуңғы аңлатмаларҙы);
-уҡыуҙың төрлө төрҙәрен ҡулланыу: өйрәнеү, ҡарап сығыу, танышыу;
-төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте ҡуллана белеү (тотош текст, иллюстрация, таблицалар, схемалар);
-һүҙлектәр, белешмәләр менән ҡулланыу;
-анализ һәм синтез эшләү;
-сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәре булдырыу.
Аралашыу эшмәкәрлеге:

-телмәр ситуацияһына ярашлы рәүештә үҙ фекереңде телдән һәм яҙма сағылдырыу;
-аралашыу мәсьәләләрен хәл итеү маҡсатында тел сараларын ҡулланыу;
-диалог һәм монолог телмәр төрҙәре менән ҡуллана алыу;
-үҙ фекереңде әйтә һәм дәлилләй алыу;
-башҡаларҙы тыңлау һәм ишетеү, үҙ фекереңде үҙгәртә алыуға әҙер булыу;
-бер фекергә килеү һәм уртаҡ эшмәкәрлек тураһында килешеү, план төҙөү;
-аңлашылмаған мәсьәләләр буйынса һорауҙар биреү.

Предмет үҙләштереү кимәле

-өндәр һәм хәрефтәрҙе, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙы айырыу, фонетик анализ яһау;
- һүҙ составы (тамыр һәм ялғауҙар) буйынса тикшереү, яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы таныу;
-ҡушма һүҙҙәрҙе, ҡушма һүҙҙәрҙә ҡалын һәм нәҙек айырыу билдәләрен, ялғауҙарҙы, нәҙеклек билдәһенә бөткән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙы, ҡуш тартынҡыларҙы, тамыр һүҙҙәрҙәге о-ө, ы-е хәрефтәренең ялғау ҡушҡанда ла һаҡланыу һәм яҙылмау осраҡтарын белеү һәм дөрөҫ яҙыу;
-исемдәрҙе, ҡылымдарҙы, сифаттарҙы, ярҙамсы һүҙҙәрҙе таныу һәм программа кимәлендә морфологик анализ яһау;
-һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе айырыу, һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатыу;
-һөйләү маҡсатына ҡарап, һөйләмде өс төргә бүлеү һәм тейешле тыныш билдәләрен ҡуйыу;
-һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен белеү;
-һөйләмдең тиң киҫәктәрен күреү, теркәүестәр булмаған осраҡта тейешле тыныш билдәләрен ҡуйыу, телмәрҙә һаналып киткән һүҙҙәрҙе ҡулланыу;
-һүҙҙәрҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһен айыра белеү, тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе, синоним, антоним, омонимдарҙы белеү һәм телмәрҙә ҡулланыу;
-ныығынған һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәһен аңлатыу, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу;
-дәреслектән нәфис әҙәбиәтте уҡыу (хикәйә, әкиәт, шиғыр). Тексты логик яҡтан тамамланған өлөштәргә бүлеү. Уларға исем ҡушыу (план төҙөү);
-тәҡдим ителгән текст буйынса ентекле изложение яҙыу.

4-се класс

Шәхси үҫеш кимәле

-башҡорт теленең матурлығын, тасуирилығын һәм яғымлылығын тоя белеү һәм уның менән ғорурланыу, башҡорт теле менән ҡыҙыҡһыныу;
-белем алыуҙың мөһимлеген, үҫеш өсөн кәрәклеген аңлау;
-белем алыу өсөн төрлө сығанаҡтар ҡулланыу;
-телмәр мәҙәниәтен камиллаштырыуға ынтылыштың үҫеүе;
-башҡа халыҡтар мәҙәниәтенә толерантлы мөнәсәбәт булдырыу.

Метапредмет кимәле

-дәрестең темаһын һәм маҡсатын үҙ аллы билдәләү;

-уҡытыусы, коллектив менән бергә йәки үҙ аллы проблеманы хәл итеү планын төҙөү;
-план буйынса эшләү, эшеңде план менән сағыштырыу, кәрәк саҡта төҙәтмәләр индереү;
- үҙ-үҙеңә контроллек итеү һәм баһа биреүҙе тормошҡа ашырыу.

Танып белеү эшмәкәрлеге:
-текст мәғлүмәтенең бөтә төрҙәрен уҡыу (текстың үҙен,текстан һуңғы аңлатмаларҙы, өҫтәмә таблицаларҙы, схемаларҙы);
-уҡыуҙың төрлө төрҙәрен ҡулланыу: тулыһынса өйрәнеү, ҡарап сығыу, танышыу;
-төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте ҡуллана белеү (тотош текс, иллюстрация, таблица, схемалар);
-мәғлүмәтте бер төрҙән икенсе тергә әйләндереү (планын төҙөү, схемаһын, таблицаһын эшләү, проектын төҙөү);
-һүҙлектәр, белешмәләр менән ҡулланыу;
-анализ һәм синтез эшләү;
-сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәре булдырыу;
-фекерләү һәм хикәйәләү тибындағы текст төҙөү.

Аралашыу эшмәкәрлеге:
-телмәр ситуацияһына ярашлы рәүештә үҙ фекереңде телдән һәм яҙма сағылдырыу;
-аралашыу мәсьәләләрен хәл итеү маҡсатында тел сараларын ҡулланыу;
-диалог һәм монолог телмәр төрҙәре менән ҡуллана алыу;
-үҙ фекереңде әйтә һәм иҫбатлай алыу;
-башҡаларҙы тыңлау һәм ишетеү, үҙ фекереңде яҡлай йәки үҙгәртә алыу;
-бер фекергә килеү һәм уртаҡ эшмәкәрлек тураһында килешеү, план төҙөү;
-аңлашылмаған мәсьәләләр буйынса һорауҙар биреү;
-парлап йәки төркөмләп эшләү барышында аралашыу;
-ғаиләлә, йәштәштәрең менән шәхси үҙ-ара мөнәсәбәттәр, бәхәсле ситуацияларҙың сиселешен хәл итеү.

Предмет үҙләштереү кимәле
-өн һәм хәрефтәр тураһында үтелгәнде системалаштырыу, һүҙгә тулы фонетик анализ яһау;
-һүҙҙәрҙең составын белеү, тамырҙаш һүҙҙәр табыу, яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы айырыу, һүҙ составына анализ яһау;
-башҡорт теленең орфограммалары тураһында белемдәрҙе системаға һалыу. Тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡуйып, хатаһыҙ күсереп яҙыу. Төрлө тикшереү эштәрен үтәргә өйрәнеү;
-һүҙ, һүҙбәйләнеш һәм һөйләмдең оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын белеү. Һөйләү маҡсаты буйынса һөйләмдәрҙе хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәргә айырыу, уларҙы дөрөҫ интонация менән уҡыу һәм тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙыу. Һөйләмдең баш һәм әйәрсән киҫәктәрен табыу. Тарҡау һәм йыйнаҡ һөйләмдәрҙе үҙләштереү. Һөйләмдең тиң киҫәктәрен

телмәрҙә ҡулланыу, улар араһында тейешле тыныш билдәләрен ҡуйыу. Тиң киҫәктәр менән һөйләмдәр уйлау;
-ябай һөйләмгә синтаксик анализ яһау;
-исемдәрҙең йәнле һәм йәнһеҙ предметтарҙы атау функцияһын, грамматик үҙенсәлектәрен белеү, исемдәргә морфологик анализ яһау;
-ҡалын һәм нәҙек килеш ялғауҙарын, рус теленән ингән һүҙҙәрҙең килеш ялғауҙарын дөрөҫ яҙыу;
-алмаштарҙың телмәрҙәге функцияһын аңлау, алмаш төркөмсәләрен белеү, алмаштарға морфологик анализ яһау;
-сифаттарҙың грамматик үҙенсәлектәрен белеү, уларға морфологик анализ яһау, артыҡлыҡ дәрәжәһендәге сифаттарҙы дөрөҫ яҙыу;
-ҡылымдарҙың яһалышын, грамматик үҙенсәлектәрен, һөйләмдәге функцияһын белеү. Ҡылымға морфологик анализ яһау;
-рәүештәрҙең грамматик үҙенсәлектәрен белеү, рәүеш менән сифаттарҙың оҡшашлығын һәм айырмаһын үҙләштереү. Рәүешкә морфологик анализ яһау;
-ябай һәм ҡушма һандарҙы айырыу, һан төркөмсәләрен, һандарҙың дөрөҫ яҙылышын үҙләштереү. Һанға морфологик анализ яһау;
-ярҙамсы һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыу;
-һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәләрен аңлау, Күп мәғәнәле, тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе телмәрҙә ҡулланыу.
Синонимдарҙы, антоним дарҙы, омонимдарҙы, нығынған һүҙбәйләнештәрҙе телмәрҙә ҡулланыу;
бәйләнешле текст төҙөү. Текст буйынса план төҙөү. Текстың йөкмәткеһен һөйләү. Инша, изложение яҙыу;
фәнни тексты уҡыу һәм аңлау (өлөштәрен билдәләү, һәр өлөшкә исем ҡушыу, һорауҙар биреү);
тыңлаған текстың темаһын билдәләү;
хикәйәләү тибындағы ентекле изложение яҙыу (90-100 һүҙ), тейешле әҙерлектән һуң тәкдим ителгән темаға инша яҙыу;
телмәр этикетын үҙләштереү һәм ғәмәлдә ҡулланы

«Башҡорт теле» уkыу предметының йөкмәткеһе
1 классбашҡорт теле(17 + 17сәғәт)

Әлифбаға тиклемге осор

1. Предмет. Тирә-йүндәге предметтарҙы өйрәнеү. Улар тураһында түбәндәге алгоритм буйынса һөйләү:

- предметтың исеме (аталышы);

- предметтың формаһы (йомро, түңәрәк, оҙонса, шаҡмаҡ, квадрат, тура дүртмөйөш, өсмөйөш, ялпаҡ һ. б.);

- предметтың тышҡы торошо (шыма, ҡытыршы, йомшаҡ, ҡаты һ. б.);

- предметтың төçө;

- предмет нимәнән эшләнгәнен билдәләү;

- предметтың тормошта ҡулланылышы.

Предметты өйрәнеү, күҙәтеү. Уны башҡа объект менән сағыштырыу, уға оҡшаш объекттар табыу. Уларға хас оҡшаш һыҙаттарҙы билдәләү. Объекттың төп, үҙәк үҙенсәлектәрен табыу, билдәләү. Уларҙы ваҡ, төп булмаған үҙенсәлектәрҙән айыра белеү. Предмет һәм уға ҡағылышлы күренеш буйынса үҙ фекеренде белдереү.

Предметты өйрәнеү ысулдарын табыу, билдәләү һәм һығымта яһау (предметты өйрәнеү ысулы — уны ҡулдар менән тотоп ҡарау, күҙҙәр менән күреү). Фекерләү, аң-зиһен формалаштырыу ысулдарын (күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау, баһалау, йомғаҡлау) үҙләштереү.

2. Һүҙ тураһында төшөнсә.

а) Һүҙ. һүҙҙең исем атау функцияһы. Унын телмәрҙәге әһәмиәте. Һүҙҙең әйтелешен тыңларға һәм ишетергә өйрәнеү, уны күҙәтеү. Һығымта: һүҙҙе әйтәбеҙ һәм ишетәбеҙ.

б) Предметтың исемен белдергән һүҙҙәр. Предмет - һүҙҙәр. Уларҙы символик тамғалау. Предмет - һүҙҙәр йыйыу, һүҙ төркөмө.

Сюжетлы һүрәт. «Мажаралы футбол». «Спорт» темаһына ҡағылышлы предмет - һүҙҙәр туплау. Ул һүҙҙәрҙе ҡулланып, һүрәт буйынса һөйләшеү ҡороу, уларҙы баланың лексиконына индереү. һүрәттәге сюжетҡа оҡшаш ситуацияларҙа юмор, шаяртыу элементтарын ҡулланыу; сетерекле, көтөлмәгән хәл - ваҡиғаларҙан сығыу юлдарын таба белергә өйрәтеү. Һаулыҡ һаҡлау, спортка ылыҡтырыу мәсьәләләренә әһәмиәт биреү.

в) Предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр. Хәрәкәт - һүҙҙәр. Уларҙы символик тамғалау. Һүҙбәйләнеш (предмет - һүҙ + хәрәкәт - һүҙ: уҡыусы яҙа, бала уйнай, ямғыр һибәләй һ. б.

Сюжетлы һүрәт менән эш. «Хәрәкәттә бәрәкәт». Балаға һәр кем үҙенсә матур булыуын күрһәтеү. Үҙ - үҙеңде яратырға, тышҡы ҡиәфәтең, һаулығың тураһында ҡайғыртып йәшәргә кәрәклеген аңғартыу. Хәрәкәт организм өсөн файҙалы икәнен төшөндөрөү.

г) Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. Билдә - һүҙҙәр. Уларҙы символик тамғалау. һүҙбәйләнеш (билдә - һүҙ + предмет - һүҙ: матур һүрәт, һипкелле ҡыҙ, уңған әсәй, япраҡлы ағас*;* билдә - һүҙ + хәрәкәт - һүҙ: яй йүгерә, ҡапыл ырғыны, матур яҙа, шәп уҡый, күп һөйләй, насар күрә һ. б.

Сюжетлы һүрәт менән эш. «Көҙгө урманда». Көҙгө урманды һүрәтләп һөйләгәндә билдә - һүҙҙәрҙе ҡулланып һөйләү. һөйләм һыҙмаһына ярашлы көҙ тураһында телдән инша төҙөү (2—3, 3—4 һөйләм).

Тикшереү эше. Балаларҙың һүҙ төркөмдәрен нисек үҙләштереүҙәрен күҙаллау. Предмет - һүҙҙәр, хәрәкәт - һүҙҙәр, билдә - һүҙҙәр әйтеп, һүҙ схемаларын төшөртөү (ҡалаҡ, сынаяҡ, айыу, ҡуян, сейә, алма, саған, уçаҡ; тора, бешерә, иләй, түгә, бара, илай, һанай; тоҙло, еүеш, һыуыҡ, һөйкөмлө, егәрле һ. б.; малай бейей, апай һөйләй, ел иçә, ҡыҙыл сәскә, йомшаҡ ҡул, сәнскеле үлән, һимеҙ һарыҡ, ҡурҡаҡ ҡуян, ҡысҡырып һөйләй, аҙ яҙған, матур кейенгән һ. б.

3. Һөйләм.

һөйләм тураһында төшөнсә. һөйләмдең һыҙмаһы. һөйләмдең башы. һөйләмдең аҙағында тыныш билдәләре (нөктә, һорау,өндәү).

Бәләкәс һәм ҙур һөйләмдәр. *(*Көҙ килде. Матур көҙ килде. һөйләмде киңәйтеү, тулыландырыу. һөйләмгә һүҙ өçтәү тамғаһы.

Сюжетлы һүрәт. «Ҡоштар менән хушлашыу». Көҙгө күренештәргә иғтибарлы булырға, ҡоштар тормошо, көҙөн тыуған яҡтары менән хушлашыу күренештәрен күҙәтергә күнегеү һәм күргән-белгәндәргә таянып һөйләү, тәбиғәт матурлығы аша баланың эске психик торошон ыңғай яҡҡа көйләргә, унан көс - энергия алырға өйрәтеү.

4. Ярҙамсы һүҙҙәр.

а) *Һәм, менән* ярҙамсы һүҙҙәре. Улар менән һөйләмдәр төҙөү.

б) *Да-дә, та-тә, ҙа-ҙә, ла-лә* ярҙамсы һүҙҙәре. Уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе һөйләм һыҙмаһында тамғалау.

в) *Ғына-генә, ҡына-кенә* ярҙамсы һүҙҙәре. Уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе һөйләм һыҙмаһында тамғалау.

Сюжетлы һүрәт. «Бесәй менән булған мажара». Бесәй менән булған мажараларҙы эҙмә-эҙлекле итеп тасуирлап һөйләргә; мәрәкәле, ҡыҙыҡ күренешкә юмор, шаярыу менән ҡарарға күнегеү, кешенең һиңә ҡарата әйтелгән шаяртыу һүҙҙәрен аңлай белеү.

Тикшереү эше. һөйләмде тыңлау, ишетеү һәләтен һәм һыҙма ярҙамында күрһәтеү күнекмәләренең кимәлен күҙаллау. һөйләм әйтеү һәм уның һыҙмаһын һыҙҙырыу. (Әсмә сәсен урә. Әсмәнең күлдәге матур ғына. Ул сәсен тарай ҙа тарай.

5. Һүҙ һәм өн.

а) Өн тураһында төшөнсә. һүҙҙе тыңлау. һыҙма ярҙамында һүҙҙә һәр өндөң урынын билдәләү - һүҙҙең өн моделен төҙөү. Өн модель буйынса һүҙҙе укыу. Һүҙҙең өн моделенә ярашлы һүҙҙәр уйлау, уны моделгә урынлаштырып ҡысҡырып укыу.

Сюжетлы һүрәт. «Йәшенмәк уйнағанда». Телмәр үçтереү. Уйнағанда һанашмаҡтар ҡулланыу.

б) Өндәрҙе тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәргә айырыу. Өндәрҙе күҙәтеү, тикшеренеү эше үткәреү һәм уларҙы айырыу ысулдарын, юлдарын билдәләү. Балалар тарафынан асыласаҡ ысулдар: өндө ҡысҡырып әйтеп тыңлау һәм өн әйтелгән мәлдә ҡаршылыҡ осрау-осрамауын тойомлау. Өндө әйткәндә ауыҙ ҡыуышлығынан өрөлгән һауаға ҡаршылыҡ ҡуйылыу осраҡтарын күҙәтеү: ирендәр ҡымтыла, тел аңҡауға йәбешә, аҫҡы һәм өҫкө рәт тештәр тоташа. Шулай итеп үпкәнән өрөлгән һауаға ҡаршылыҡ тыуа. Тимәк, әйтелгән өн тартынҡы, уны һуҙып әйтеп булмай. Өндө әйткәндә үпкәнән өрөлгән һауа ҡаршылыҡҡа осрамай иркен сыҡһа, өн — һуҙынҡы. Тартынҡы, һуҙынҡы өндәрҙе айырып тамғалау (тартынҡы — шаҡмаҡ, һуҙынҡы — түңәрәк).

Ижек. Һүҙҙе ижеккә бүлеү. һүҙҙе ижеккә бүлгәндә эш итеү ысулдарын асыу (ритмлап ҡул сабыу, ҡәләм менән партаға һуғыу, аяҡ тибеү, эйәккә ҡул һыртын ҡуйып тойомлау һ. б.), һүҙҙең өн моделендә уны символик рәүештә ижеккә бүлеү. һүрәт менән эш. Телмәр үҫтереү. «Ҡымыҙ — файҙалы эсемлек». Ата-бабаларҙың кәсеп-һөнәрҙәре менән танышыу, өйрәнеү.

Баҫым. Баҫым һүҙҙең аҙаҡҡы ижегенә төшә. Башҡорт телмәре музыкаль һәм яғымлы. Телмәр үҫтереү. «Өйөрҙә бер күк ҡолон, ҡойроғо — бөҙрә толом». Һүрәтләү саралары (сағыштырыу): мороно ебәк бәрхәт, күҙҙәре янар йондоҙ, ҡойроғо бөҙрә толом, тояҡтары нескә талдай, ҡолаҡтары ҡайсы төҫлө һ. б.

в) Нәҙек һәм ҡалын өндәр.

Ҡалын һәм нәҙек әйтелешле һүҙҙәрҙе күҙәтеү, сағыштырыу, һығымта яһау. Саф башҡорт һүҙенең беренсе ижеге нәҙек әйтелешле булһа, ҡалған ижектәре лә нәҙек әйтелешле. Саф башҡорт һүҙенең тәүге ижеге ҡалын булһа, ҡалған ижектәре лә ҡалын. Ҡалын, нәҙек өндәрҙе айырып тамғалау (ҡалын өндәр — зәңгәр, нәҙек өндәр - һары төҫтә). һүҙҙәрҙе өн моделе буйынса уҡыу.

г) Һаңғырау һәм яңғырау тартынҡылар.Пар тартынҡылы һүҙҙәрҙе күҙәтеү, сағыштырыу. Шау (һаңғырау) йәки тауыш (яңғырау) ярҙамында яһалған өндәр. һаңғырау һәм яңғырау тартынҡыларҙы тамғалау.

Әлифба осоро

Хәреф — өндөң тамғаһы. Алфавит.

Бик борон яҙма телмәр булмағанда кешеләр нисек аралашҡан? Алфавиттың хәрефтәрен өйрәнеү кәрәкме? Ни өсөн?

[ә] өнөн тамғалау. Әә хәрефе. Әә хәрефен яҙыу. һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» укыу): *шәм, тәм, ләм, мәл, һәм, кәм, сәй, әсәй, әтәс, Әнәс, Әсмә, әрем, кәмә, кәзә, бәлә.*

Телмәр үҫтереү. «Күл буйында».

[а] өнөн тамғалау. Аа хәрефе. Аа хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу(«тишекле» уҡыу): *ал, ат, аш, ас, аҡ, ай, ала, ата, аша, аса, аға, баш, таш, ҡаш, ҡар,*

май, бай, шар, зар, тар, атай, ағай, апай, ашай, арый, арыш, алҡа, арпа, алма, арҡа, бара, бала, тала, ҡала.

[ө] өнөн тамғалау. Өө хәрефе. Өө хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙен моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *өс, өт, өй, өн, өр, һөй, йөй, сөй, көй, көн, төн, өкө, бөрө, көлтә, төйөн, бөйөк, төлкө, бөркөт, һөлөк.*

[о] өнөн тамғалау. Оо хәрефе. Оо хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *он, ос, оло, ошо, оро, ҡош, тоҙ, боз, ҡор, тор, ойоҡ, осоҡ, отош, ҡоро, һоро, орсоҡ, борон, болон, ҡором, ҡорот, толом, морон, солон, ҡозоҡ.* Һуҙынҡылар таблицаһын төҙөү.

[ү] өнөн тамғалау. Үү хәрефе. Үү хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *үр, үт, үç, үрә, үтә, үçә, бүл, күл, сүл, күс, үлән, һүз, үгеҙ, үтек, бүре, бүләк, күнәк, йүләр, йүтәл, гүзәл.* Телмәр үçтереү. «Себештәрем, бәпестәрем». [у] өнөн тамғалау. Уу хәрефе. Уу хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *уй, уҡ, ун, ур, ул, ут, ус, ура, ута, ҙур, ҡура, тура, бура, Урал, уçал, уçаҡ, ураҡ, усаҡ, утын, упҡын, урғыс, урман, уңған, уртаҡ.*

[л] өнөн тамғалау. Лл хәрефе. Лл хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: *ал, ул, ала, оло, ләлә; Ләлә ал — ала.* һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *ал, ул, ил, ала, илэ, оло, пул, тул, бил, кул, Ләлә, алты, алҡа,иләк, улән, олон, өлөш, илек.*

[м] өнөн тамғалау. Мм хәрефе. Мм хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: *мал, мул, мәл, ләм; Ул алма ала.* Һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *мал, мәл, мул, ләм, өмә, алма, Милә, миләш, Морат.*

Тартынҡылар таблицаһын төҙөй башлау. [т] өнөн тамғалау. Тт хәрефе. Тт хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: *таш, тул, тиш, ата, ута, утә, отам, тота; Милә, тутәл ута).* һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *ат, ут, ит, от, өт, ут, тал, тәм, тут, тот, тир, таш, туш, төш, ата, ута, өтә, утә, тора, тара, таба, тала, тирә, тугә, тубә, тибә, тота, төшә, тишә, тана, торба, торна, төлкө, тирмә, тишек, төтөн, тирәк, тутәл.* Телмәр үçтереү. «Төлкө менән торна» әкиәте.

[ш] өнөн тамғалау. Шш хәрефе. Шш хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: *шәл, шул, ошо, таш, төш, тишә, тушә; Урал, аш аша.* Һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *шат, шар, шәл, шәп, шом, таш, ҡаш, баш, биш, туш, буш, ҡуш, йәш, ошо, аша, шама, шыма, тишә, шешә, бешә, тушә, таша, төшә.*

[б] өнөн тамғалау. Бб хәрефе. Бб хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: *бал, убә, бил, бөтә, бәлә, бала; Булат бал ала.* һүҙҙең моделен төҙөү һәм

өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *баш, бал, бил, боç, баз, бит, биш, бала, бәлә, булә, була, бура, бөрө, баҡа, башҡа, батша, балта, болот, болон, болан, буран, бишек, бесәй, Булат, Банат, Бикә, Борай, Баймаҡ.*

Телмәр үçтереү. «Бал».

[р] өнөн тамғалау. Рр хәрефе. Рр хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: *ур, ир, өр, ара, ура, рәт, урт, тура, төрә; Турат арба тарта.* һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *ур, ур, өр, урә, ура, бэр, бар, бөр, бор, бур, бара, бора, бөрә, бура, урам, урәм, ураҡ, арыш, арык, арпа, арҡа, тара, төрә, тура, турә, Урал.*

Телмәр үçтереү. «Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр».

[и] өнөн тамғалау. Ии хәрефе. Ии хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: *ил, иш, биш, тишә, бирә, тирмә, шишмә; Рәшит ат ашата. Эмир тутәл у тар.* һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *ирек, ишәк, имән, иләк, ирен, иген, итек, исем, тирәк, кишер, тишек, шишмә, Илһам, Илнур, Илузә.*

Телмәр үçтереү. «Икмәк бөтә нәмәгә баш».

[н] өнөн тамғалау. Нн хәрефе. Нн хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: *ун, ин, өн, он, инә, ана, нур, төн, тин, мин; Нөгөш матур. Имән матур була.* һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *нисә, ниңә, нимә, банан, менән, Нәркәс, Нәғим, Нәбир, Нәсих.*

[ң] өнөн тамғалау. ң хәрефе. ң хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: *аң, уң, иң, өң, таң, тиң, туң, шаң, моң, моңло; Был буре өңө. Булмәләмоң тарала.* һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *моңаана, аңлы, миңае, тиңдәш, мөңрәй.*

[с] өнөн тамғалау. Сс хәрефе. Сс хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: *асам, сисә, сурә, сөсө, Сура, Сәлим, Солтан; Сабир ситән урә. Әсмә сәләм бирә. Сура улән сәсә.* һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу):*сәскә, сәсәк, сукеш, саған, сабаҡ, сыбар, суҡыш, асыш, Сэғит, Сәрмән, Сәфәр.*

Телмәр үçтереү. «Сыбар тауыҡ» әкиәте.

[э] өнөн тамғалау. Ээ(е) хәрефе. Ээ(е) хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: *эсә, эре, энә, элә, эшсе, эңер, тел, бел, бер, сер, белем; Эт өрә. Себеш үлән тарта. Эңер иртә төшә.* һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *эçе, эйә, эйәр, эйәк, эсәк, кеше, серек, бесәй, кесе.*

[ы] өнөн тамғалау. Ыы хәрефе. Ыы хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: *ысын, арыш, алыш, урын, мышы, тырыш; Сыртлан тырыш*

бала, һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *кыш, йыр, ышыҡ, ысыҡ, ҡыҙыл, кыҙыҡ, быйыл, муйыл, быйма.*

Телмәр үҫтереү. «Бал ҡорттары».

[з] өнөн тамғалау. Зз хәрефе. Зз хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Парлы яңғырау-һаңғырау тартынҡылар [з] - [с].

Телмәр үҫтереү. «Ике кәзә» әкиәте.

[й] өнөн тамғалау. Йй хәрефе. Йй хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү. *Йә, йө, йү* ҡушымсалары менән нәҙек һүҙҙәр төҙөү: *йәй, йәйә, бейә, сейә, йәмле, йәшел, йөрөй, мөйөш, йүтәл, йүнсел. Йо, йы* ҡушымсалары менән ҡалын һүҙҙәр төҙөү: *йомро, йыр, йыл. Йе* ҡушымсаһы һүҙ уртаһында һәм һүҙ аҙағында: *тейеш, тейен, бейе, мейе, әсәйем, өләсәйем, бесәйем, инәйем.*

[г] өнөн тамғалау. Гг хәрефе. Гг хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

[к] өнөн тамғалау. Кк хәрефе. Кк хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү. Парлы яңғырау-һаңғырау тартынҡылар [г] - [к].

[ҡ] өнөн тамғалау. Ҡҡ хәрефе. Ҡҡ хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Нисәү минең бәпесем?»

[ғ] өнөн тамғалау. Ғғ хәрефе. Ғғ хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү. Парлы яңғырау-һаңғырау тартынҡылар [г] - [ҡ].

Телмәр үҫтереү. «Катоктағы мажара».

[ҙ] өнөн тамғалау. Ҙҙ хәрефе. Ҙҙ хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

[ҫ] өнөн тамғалау. ҫ хәрефе. ҫ хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү. Парлы яңғырау-һаңғырау тартынҡылар [ҙ] - [ҫ].

Телмәр үҫтереү. «Ҡомһоҙ эт» әкиәте.

[һ] өнөн тамғалау. һһ хәрефе. һһ хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «һаумыһығыҙ!» тип өндәшәм һәр кешегә».

[х] өнөн тамғалау. Хх хәрефе. Хх хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Эш һөймәгән көн итмәҫ».

[йа] өндәрен тамғалау. Һүҙҙә й һәм а хәрефтәренең бер ваҡытта ла йәнәш яҙылмауы. [й] һәм [а] өндәре, йәғни [йа] өндәре ишетелгән ерҙә я хәрефе яҙылыуы. Яя хәрефе — ике өндө белдергән хәреф. Яя хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Яҡшы һүҙ — йән аҙығы».

[йэ] өндәрен тамғалау. һүҙҙә й һәм э хәрефтәренең бер ваҡытта ла йәнәш яҙылмауы. [й] һәм [э] өндәре, йәғни [йэ] өндәре ишетелгән ерҙә е хәрефе яҙылыуы. Ее хәрефе - ике өндө белдергән хәреф. Ее хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Кешенең матур сифаттары».

[йу] өндәрен тамғалау. Һүҙҙә й һәм у хәрефтәренең бер ваҡытта ла йәнәш яҙылмауы. [й] һәм [у] өндәре, йәғни [йу] өндәре ишетелгән ерҙә ю хәрефе яҙылыуы. Юю хәрефе — ике өндө белдергән хәреф. Юю хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Йылҡы малы».

[у], [ү] өндәрен тамғалау. һүҙҙең уртаһында, аҙағында у, ү хәрефтәренең яҙылыуы *(тау, шау, тәү, белеү, тауыҡ, еүеш* һ. б.), һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Йәйләүҙә».

[п] өнөн тамғалау. Пп хәрефе. Пп хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Терпе» әкиәте.

[д] өнөн тамғалау. Дд хәрефе. Дд хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Тапҡыр ҡомаҡтар».

[ж] өнөн тамғалау. Жж хәрефе. Жж хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Ҡарға менән ҡыҫала».

[в], [у], [ү] өндәрен тамғалау. Вв хәрефе. Вв хәрефен яҙып өйрәнеү. [үәғәҙә], [уаҡыт] тип әйтәбеҙ, «вәғәҙә», «ваҡыт» тип яҙабыҙ. Вв хәрефе рус теленән ингән һүҙҙәрҙә: *ваза, вагон, вокзал, Волга, вышка, диван, велосипед,* һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

[ф] өнөн тамғалау. Фф хәрефе. Фф хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Бесәй ҙә балыҡ тота».

Нәҙеклек (ь) һәм ҡалын (ъ) айырыу билдәләре. Һүҙҙә ья, ъя тамғалары. Рус теленән һәм башҡа сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә нәҙеклек билдәһе

(ь): *альбом, бинокль, лагерь, мебель, нефть, коньки, пальто, фасоль, фонарь, февраль, апрель, июнь, июль, сентябрь, октябрь, ноябрь, декабрь.*

Телмәр үҫтереү. «Буранлы ҡыш».

[ц] өнөн тамғалау. [ц] өнө һәр саҡ ҡалын әйтелешле. Цц хәрефе. Цц хәрефе сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә: *цирк, цифр, цинк, циркуль, концерт, мотоцикл,* һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Циркта».

[щ'] өнөн тамғалау. [щ'] өнө һәр саҡ йомшаҡ әйтелешле. Щщ хәрефен яҙып өйрәнеү. Башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә щ хәрефе: *щи, борщ, плащ, щётка,* һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

[ч'] өнөн тамғалау. [ч'] өнө һәр саҡ нәҙек әйтелешле. Чч хәрефен яҙып өйрәнеү. Чч хәрефе һүҙҙәрҙә: *чабан, врач, Чапаев, Учалы.* Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

[й'о] өндәрен тамғалау. [й'] һәм [о], йәғни [й'о] өндәре ишетелгән ерҙә ё хәрефе яҙылыуы. *ёлка.* Её хәрефе — ике өндө белдергән хәреф. ё — рус һүҙҙәрендә тартынҡыны йомшаҡ итеп әйттереүсе тамға: *[шахт'ор], [л'отч'ик], [л'ифт'ор], [лар'ок].* Её хәрефен яҙып өйрәнеү. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Алфавит. Алфавит хәрефтәренең әйтелеше: Аа [а], Бб [бы], Вв [вы], Гг [гы], Ғғ [ғы], Дд [ды], Ҙҙ [ҙы], Ее [йе], Её [й'о], Жж [жы], Зз [зы], Ии [и], Йй [йы], Кк [кы], Ҡҡ [ҡы], Лл [лы], Мм [мы], Нн [ны], ң [ңы], Оо [о], Өө [ө], Пп [пы], Рр [ры], Сс [сы], ҫ [ҫы], Тт [ты], Уу [у], Үү [ү], Фф [фы], Хх [хы], һһ [һы], Цц [це], Чч [че], Шш [шы], Щщ [ща], ъ (ҡалын айырыу билдәһе), Ыы [ы], ь (нәҙеклек билдәһе, нәҙек айырыу билдәһе), Ээ [э], Әә [ә], Юю [йу], Яя [йа].

Алфавиттың ҡулланылышы: кластағы уҡыусыларҙың фамилиялары исемлеген алфавит буйынса төҙөү, китапхана кәштәләренә китаптарҙы яҙыусыларҙың фамилияларын алфавит тәртибенә яраҡлаштырып ҡуйыу, һүҙлек һүҙҙәренең алфавит буйынса урынлаштырылыуы.

Башҡорт теле (16 сәғәт)

1. Алфавит. Алфавитта хәрефтәр һаны, тәртибе. Алфавиттың тәғәйенлә-неше. Алфавитты ҡулланыу. Алфавит хәрефтәрен дөрөҫ яҙыу.

2. Хәреф һәм өн. Һүҙҙәге һуҙынҡы, тартынҡы өндәрҙең айырмаһын билдәләү һәм улар тураһында ҡыҫҡа мәғлүмәт биреү, һөйләй белеү. Хәреф. Уның функцияһы.

а) Һуҙынҡы өндәр.

Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар таблицаһы.

*	Ә	Ө	Ү	э(е)	И
**	А	О	У	Ы	—

Бер һуҙынҡы хәреф менән генә айырылыусы һүҙҙәр төҙөү һәм әйтеп яҙыу: *ай — уй, ҡар — ҡыр, бай — бәй, бил — был, тор — тор, һут — һут, ҡаш — ҡуш, мал — мәл, арыш — алыш, урам — ураҡ, көрәк — кәрәк* һ. б. һүҙҙә бер генә хәрефте алмаштырыу менән мәғәнәнең үҙгәреүе.

Күсереп яҙыу.

б) Тартынҡы өндәр. Тартынҡы хәрефтәр таблицаһы.

□* □**	Б	В	Г	Ғ	ж	д	ҙ	З	й	р	л	м	н	н	-	—
□* □**	П	Ф	к	Ҡ	ш	т	Ç	С							Х	Һ

Тартынҡы өндәр нәҙек һуҙынҡылар уратылышында. Тартынҡы өндәр ҡалын һуҙынҡылар уратылышында. һүҙҙә бер генә тартынҡы хәрефте алмаштырыу менән мәғәнәнең үҙгәреүе: *бар — пар, Нал — тал, йыл — ҡыл, мул — ҡул, шар — шат, таш — тап, суп — сүл, көр — көс, күсә — күбә, ҡыҙыҡ — ҡыйыҡ, тараҡ — ҡараҡ, йәмле — йәнле, Налам — ҡалам, тырыш — шырыш* һ. б.

Күсереп яҙыу.

3. Ижек. Һүҙҙе ижеккә бүлеү. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү.Башҡорт теленең төп законына ярашлы һүҙҙәр йыйыу: һүҙҙенберенсе ижеге нәҙек булһа, башҡа ижектәре лә нәҙек (нәҙек һүҙ), ә беренсе ижеге ҡалын булһа, башҡа ижектәре лә ҡалын (ҡалын һүҙ). һүҙҙе дөрөç күсереп яҙыу.

4.Баш хәреф

Кешенең исем-шәрифтәре. Хайуан ҡушаматтары. Ер-һыу атамалары.

5. о — ө, у — ү хәрефтәре менән һүҙҙәр.

о — ө, у — ү хәрефтәре менән һүҙҙәр йыйыу, уларҙы яҙып өйрәнеү. һөйләм күсереп яҙыу.

6. Һүҙҙә [э] өнөн хәрефтәр менән тамғалау.

Э хәрефенең һүҙ башында ғына яҙылыуы,[э] өнөнөң һүҙ уртаһында е хәрефе менән тамғаланыуы.

7. Йә, йө, йү, йе (һүҙ уртаһы), но, йы ҡушымсалары менән һүҙҙәр йыйыу, уларҙы яҙып өйрәнеү .

Йе ҡушымсаһы һүҙ уртаһында һәм һүҙ аҙағында: *тейеш, бейек, кейек, кейем, мейес, мейе, бейе, әсәйем, өләсәйем, бесәйем.*

8. һүҙҙә [й] өнөн хәрефтәр менән тамғалау: [йа] - я, [йу] - ю, [йэ] — е

9. Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә я, е, ё, ю хәрефтәре.

Я, е, ё, ю — рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә тартынҡыларҙы йомшартыу тамғаһы *(кухня, телефон, шахтёр, тюль* һ. б.).

Яя, Юю хәрефтәре ҡалын, Ее хәрефе нәҙек һүҙҙәрҙә яҙылыу,. Её хәрефе рус һүҙҙәрендә яҙыла.

10. Һүҙ төркөмдәре.Предметтың атамаһын беддергән һүҙҙәр. Предметтың хәрәкә-тен белдергән һүҙҙәр. Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр.

Ярҙамсы һүҙҙәр: *һәм, менән; ла-лә, да-дә, та-тә; ғына-генә, ҡына-кенә.*

Телмәр үҫтереү. Сюжетлы һүрәттәр буйынса бәләкәс хикәйәләр төҙөү. һөйләмдәр тәртибе боҙоп бирелгән текстың һөйләмдәрен тәртипкә килтереү.

5 — 6 һөйләмдән торған тексты күсереп яҙыу.

11. Һөйләм .һөйләмдең башы, аҙағы. Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре (нөктә, һорау, өндәү).

Һөйләмгә һүҙ өҫтәү, мәғәнәһен киңәйтеү. Һөйләмде күсереп яҙыу ҡағиҙәһен өйрәнеү.

«Башҡорт теле» уҡыу предметының йөкмәткеһе

2 класс (34 сәғәт)

Уҡымышлы булыу өсөн ни кәрәк.Ҙур хәреф.

Эш программаһында традицион дәрестәр,йомғаҡлау дәрестәре, дәрес-зачет, дәрес-сәйәхәт,дәрес-әкиәт формаһында үткән дәрестәр ҡаралған. Дәрес барышында
фронталь, парлы;
төркөм менән; индивидуаль эш төрҙәре ҡулланыла.

Предмет атамаһын белдереүсе һүҙҙәр. Кем? Кемдәр? Нимә? Нимәләр? һорауына яуап биреүсе һүҙҙәр. Уларҙың белдергән мәғәнәһе, телмәрҙә ҡулланылышы. Кешенең исем-фамилияһын, хайуандарҙың ҡушаматтарын, ер-һыу атамаларын белдереүсе һүҙҙәр, уларҙы баш хәреф менән яҙыу
2
Үҙ-ара һөйләшеү.Диалог.

Аралашыу ситуацияһы. Уға ярашлы һөйләшеү (диалог) төҙөү.
3
Йәмғиәт урынында осрашыу. Диалог.
Аралашыу ситуацияһы. Уға ярашлы һөйләшеү (диалог) төҙөү.
4

Әкиәт геройҙары минең тиҫтерҙәрем
Аралашыу этикеты.
5
Мәғлүмәт белешмә эҙләү.
Телефон аша өндәшеү
6
Һамаҡ, Әйтеш.Һанамыш.
Бәләкәй жанр ижады.
7
Һөйләм.
һөйләм. Уларҙың оҡшашлығы һәм айырмаһы. Әйтеү маҡсаты буйынса һөйләм интонацияһы һәм төрҙәре. Хәбәр һөйләм. Һорау һөйләм. Өндәү һөйләм. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Эйә, хәбәр, эйәрсән киҫәктәр.

8
Һүҙҙәрҙең дөрөҙ яҙылышы

Саф башҡорт һүҙҙәренең дөрөҫ яҙылышы.

9
Оо-Өө, Э э, Ы ы, Й й хәрефле һүҙҙәр.

Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен өйрәнеү һәм ғәмәли ҡулланыу. Йә, йө, йү, йе, йо, йы ҡушымсалы һүҙҙәр. Һүҙҙәрҙә ике өндө белдергән я, е, ё, ю хәрефтәре. Һүҙ башында [уы], [үэ] өндәре, в хәрефе.

10
Ике өндө белдергән хәрефтәр
Ике өндө белдергән һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы.
11
Морфология, һүҙ төркөмдәре.
Предмет атамаһын , билдәһен, хәрәкәтен белдереүсе һүҙҙәр. Уларҙың белдергән мәғәнәһе, телмәрҙә ҡулланылышы.

12
Үтелгәндәрҙе ҡабатлау

Йыллыҡ үтелгән темаларҙы ҡабатлау.

«Башҡорт теле» укыу предметының йөкмәткеһе

3 класс (34 сәғәт)

Программаны тормошҡа ашырыу формалары:

Уҡыу эшмәкәрлегенең алымдары

1
Һаумы, мәктәп! Баш хәреф ҡасан яҙыла?

Эш программаһында традицион дәрестәр,йомғаҡлау дәрестәре, дәрес-зачет, дәрес-сәйәхәт,дәрес-әкиәт формаһында үткән дәрестәр ҡаралған. Дәрес барышында
фронталь, парлы;
төркөм менән; индивидуаль эш төрҙәре ҡулланыла.

Баш хәреф.Уны һөйләмдә ҡулланыу. Исемдең һорауҙары. Яңғыҙлыҡ исемдәр. Кешенең исем-фамилияһының, хайуан ҡушаматтарының, ер-һыу атамаларының, китап һәм газета-журнал исемдәренең ҙур хәреф менән яҙылышы.
2
Башҡорт теленең төп законы.Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡылар. Тартынҡы өндәр. Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡылар.
Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Һүҙҙәрҙә тартынҡыларҙың сиратлашыуы *{китап - китабы, ҡалаҡ- ҡалағы).*
Һүҙҙәргә фонетик анализ.
3
Сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр.
Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә е, ё, ю, я хәреф-тамғалары. У-ү хәрефле һүҙҙәр.
4
Ике өндө белдереүсе хәрефтәр.
Ике өндө белдереүсе хәрефтәрҙең дөрөҫ яҙылышы.Һүҙ уртаһында е хәрефе. Й хәрефенең яҙылышы. Йо, йө, йе, йү, йы, йә ҡушымсалары.
5
Һүҙ нисек яһала?
Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре. Ярҙамсы һүҙҙәр.

6
Әйтелгәнсә яҙылмай торған һүҙҙәр
Өндәр һәм хәрефтәр. Өндәрҙең һуҙынҡыларға һәм тартынҡыларға бүленеше. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Һүҙҙәрҙә тартынҡыларҙың сиратлашыуы *{китап - китабы,калаҡ- ҡалағы).* Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡылар. Һүҙҙәргә фонетик анализ.
7
Ҡушма һүҙҙәр.Уларҙың яһалышы
Ҡушма һүҙҙәр. Ҡушылып яҙылыусы ҡушма һүҙҙәр. Ҡабатлау юлы менән йәки парлап яһалған ҡушма һүҙҙәр. Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Ҡушма һүҙҙәрҙә ҡалын (ъ) һәм нәҙек (ь) айырыу билдәләренең яҙылышы.

8
Һөйләм. Баш һәм эйәрсән.
Һөйләмдәрҙе таныу, уларҙың оҡшаш һәм айырмалы яҡтары. Һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатыу. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Һөйләү маҡсатына ҡарап, һөйләмде өс төргә бүлеү: хәбәр, һорау һәм өндәү.Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Һөйләмдең тиң киҫәктәре.Һөйләмгә синтаксик анализ
9
Текст.
Тексттың өлөштәре һәм һөйләмдәр араһында мәғәнәүи бәйләнеш булдырыу. Тексттың темаһы, төҙөлөшө (инеш, төп өлөш,йомғаҡлау).
10
Һөйләү телмәре. Монолог. Диалог.
Һөйләү телмәре. Диалог. Әңгәмәсе менән диалог ҡороу. Аралашыу оҫталығын шымартыу. Монолог. Уны һөйләү оҫталығы (логик эҙмә-эҙлелек һәм тасуирилыҡ). Эске телмәр
11
Яҙма телмәр. Хикәйә
Әҙер йәки коллектив төҙөлгән план буйынса текст төҙөү. Тәҡдим ителгәнтекст буйынса изложение (50-60 һүҙ) яҙыу. Хикәйә һәм инша яҙыу (65-70 һүҙ). Әкиәт төҙөү.

12
Ололар һүҙенә ҡолаҡ һал, унан үҙеңә аҡыл ал!
Бәләкәй күләмле хикәйәләр (текст) ижад итеү. Текстҡа ҡарата ҡыҫҡа баһалама яҙыу. Әкиәт. Әкиәт ижад итеү. Шиғыр төҙөлөшөн өйрәнеү. Шиғырҙы күсереп яҙыу үҙенсәлектәре.
13
Һаумы, йәмле йәй!
Йәй миҙгеленә ҡағылышлы хикәйәләр ижад итеү.

«Башҡорт теле» укыу предметының йөкмәткеһе

4-се класс (34 сәғәт)

Программаны тормошҡа ашырыу формалары:

Уҡыу эшмәкәрлегенең төп алымдары

1
Яңы укыу йылы менән.

Эш программаһында традицион дәрестәр,йомғаҡлау дәрестәре, дәрес-зачет, дәрес-сәйәхәт,дәрес-әкиәт формаһында үткән дәрестәр ҡаралған. Дәрес барышында

фронталь, парлы;
төркөм менән; индивидуаль эш төрҙәре ҡулланыла.

Өн һәм хәреф. Ҡайһы бер өндәрҙең үҙенсәлекле әйтелеше. Ижек, баҫым. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡылар. Парлы һәм парһыҙ, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Һүҙгә тулы фонетик анализ яһау.

2
Фонетика.Һүҙьяһалыш.
Һүҙҙәрҙең составы: тамыр һәм ялғау. Тамырҙаш һүҙҙәр. Яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар. Һүҙьяһалыш. Һүҙ составы буйынса анализ.

3
Синтаксис.Һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм

Һүҙ, һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. Уларҙың оҡшаш һәм айырмалы яҡтары. Һөйләү маҡсаты буйынса һөйләмдәрҙе хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәргә айырыу, уларҙы дөрөҫ интонация менән уҡыу һәм тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙыу. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Эйәрсән киҫәктәр: аныҡлаусы, тултырыусы, хәл. Тарҡау һәм йыйнаҡ һөйләмдәр. Һөйләмдең тиң киҫәктәре. Ябай һөйләмгә синтаксик анализ.
.

4
Морфология.
Һүҙ төркөмдәре. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре. Ярҙамсы һүҙҙәр
5
Исем.
Исемдәрҙең йәнле һәм йәнһеҙ предметтарҙы атау функцияһы. Исемдең һорауҙары. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше: берлек һәм күплек һаны, уларҙың күрһәткестәре. Төрлө килештә килгән исемдәрҙең һөйләмдәге функцияһы. Исемдәрҙең эйәлек заты менән үҙгәреше. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Уның мәғәнәһе һәм белдерелеү сараһы. Килеш һорауҙары. Ҡалын һәм нәҙек килеш ялғауҙары. Рус теленән ингән һүҙҙәрҙең килеш менән үҙгәреше. Исемдәрҙең яһалыш төрҙәре (тамыр, яһалма, ҡушма, парлы). Исемдәргә морфологик анализ.

6
Алмаш.
Алмаштарҙың телмәрҙәге функцияһы. Алмаш төркөмсәләре. Зат алмаштары. Эйәлек заты алмаштары. Һорау һәм күрһәтеү алмаштары. Алмаштарҙың килеш менән үҙгәреше. Алмашҡа морфологик анализ.

7

Сифат.
Тамыр һәм яһалма сифаттар. Сифаттарҙың үҙгәреше. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифат дәрәжәләре. Сифатҡа морфологик анализ.

8
Рәүеш.
Рәүештәрҙең яһалышы. Рәүеш төркөмсәләре. Рәүеш менән сифаттарҙың оҡшашлығы һәм айырмаһы. Рәүешкә морфологик анализ
9
Ҡылым.
Ҡылымдарҙың яһалышы. Тамыр, яһалма, ҡушма ҡылымдар. Ҡылымдарҙың үҙгәреше (заман, зат, һан). Ҡылымдарҙың барлыҡ һәм юҡлыҡ формалары.

10
Һан.

Ябай һәм ҡушма һандар. Һан төркөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы. Һанға морфологик анализ.
11
Лексика
Һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәләре. Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге. Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр. Мәғәнәләре менән бер үк төрлө булған йәки бер-береһенән мәғәнә төҫмөрҙәре менән айырыла торған һүҙҙәр - синонимдар. Антонимдар. Омонимдар. Нығынған һүҙбәйләнештәр. Уларҙы телмәрҙә ҡулланыу.
12
Үтелгәнде йомғаҡлау

Үтелгән темаларҙы иҫкә төшөрөү.

Уҡыусыларҙың башҡорт теле буйынса белем һәм күнекмәләрен баһалау системаһы

«Баһалау нормалары» башҡорт теле буйынса уҡыусыларҙың белемдәренә һәм күнекмәләренә берҙәй ҙур талаптар ҡуйыуҙы тәьмин итергә тейеш.

Уҡыусыларҙын телдән биргән яуаптарын баһалау:

Уҡыусынын яуабы түбәндәге критерийҙар менән баһалана:

- Яуаптар тулылығы һәм дөрөҫлөгө;
- Өйрәнелгәндәрҙе анлау кимәле;
- Яуаптын тел нормаларына ярашлы төҙөлөүе.

Әгәр уҡыусы өйрәнелгән материал тураһында тулы яуап бирә, төп төшөнсәләрен дөрөҫ билдәләй икән; материалды анлауын күрһәтә, үҙ фекерҙәрен нигеҙләй, белемдәрен практикала ҡуллана ала икән; материалды

эҙмә-эҙлекле һәм әҙәби тел нормаларына ярашлы итеп һөйләп бирә икән, уға «5» билдәһе ҡуйыла.
«4» билдәһе уҡыусынын «5» билдәһенә ҡуйылған талаптарға ярашлы, ләкин артабан үҙе үк төҙәтә алған 1 – 2 хатаһы , һөйләгәндә 1 – 2 урында эҙмә-эҙлеклек һаҡланмаған йәки тел хатаһы ебәрелгән яуабына ҡуйыла.
«3» билдәһе уҡыусыны теманын төп асылын белгән һәм анлаған, ләкин материалды тулы асмаған, төшөнсәләрҙе билдәләгәндә, ҡағиҙәләрҙен билдәләрен әйткәндә ҡытыршылыҡтар ебәргән; үҙ фекерҙәрен нигеҙле итеп иҫбатлай, миҫалдар килтерә алмаған; материалды эҙмә-эҙлекһеҙ һәм тел хаталары ебәреп һөйләгән осраҡта ҡуйыла.
Уҡыусы өйрәнелгән материалдын күпселек өлөшөн белмәһә, билдәмәләрҙен һәм ҡағиҙәләрҙен формулировкаларында уларҙын мәғәнәләре боҙорлоҡ хаталар ебәрһә, материалды тәртипһеҙ рәүештә икеләнеп кенә һөйләһә «2» билдәһе ҡуйыла.

Диктанттарҙы баһалау:

Диктант – орфографик һәм пунктуацион грамоталылыҡты тикшереү өсөн ин мөһим формаларҙын береһе.

Диктант бер генә билдә менән баһаланһа , «5» билдәһе хатаһыҙ йә иһә тупаҫ булмаған бер орфографик йә пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла.
«4» билдәһе – 2 орфографик һәм 2 пунктуацион хатаһы , йә 1 орфографик һәм 3 пунктуацион , йә орфографик хатаһыҙ , 4 пункпуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла.
Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 3 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйылыуы мөмкин.
«3» билдәһе 4 орфографик һәм 4 пунктуацион , йә 3 орфографик һәм 5 пунктуацион , йә орфографик хатаһы булмаған 7 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында 3 бер типтағы ебәрелһә, 6 орфографик һәм 6 пунктуацион хатаһы булған эшкә лә «3» билдәһе ҡуйылырға мөмкин.
«2» билдәһе 7 орфографик һәм 7 пунктуацион , йә 6 орфографик һәм 8 пунктуацион , йә 6 орфографик һәм 9 пунктуацион , йә 8 орфографик һәм 6 пунктуацион хатаһы булған диктанкҡа ҡуйыла.

Иншаларҙы һәм изложенияларҙы :

Инша һәм изложение – уй-фекерҙе дөрөҫ , эҙмә-эҙлекле итеп әйтеп йә яҙып бирә алыу һәләтлелеген , уҡыусыларҙын бәйләнешле телмәрҙәре күнекмәләрен билдәләүсе төп формалар.
«5» билдәһе – эштен йөкмәткеһе темаға тап килә, фактик хаталар юҡ, йөкмәткеһе эҙмә-эҙлекле асыла, эштен һүҙлеге бай, һүҙҙәр урынлы ҡулланылған, стиль һәм мәғәнәүи яҡтан текст камил, стилистик саралар урынлы ҡулланылған. Эштә йөкмәткеһе яҡтан 1 һәм телмәре яҡтан 1-2 хата булыуы мөмкин. Грамоталылыҡ - 1 орфографик йәки 1 пунктуацион , йә 1 грамматик хата булыуы мөмкин.
«4» билдәһе – эштен йөкмәткеһе , темаға тура килә, йөкмәткеһе дөрөҫ, ләкин ҡайһы бер фактик хаталар ебәрелгән, фекер ебендә эҙмә-эҙлелек бер ни тиклем боҙолған, телмәрҙен лексик һәм грамматик төҙөлөшө шаҡтай төрлө, эштен стиле ярайлы уҡ төҙөк һәм тасуири. Дөйөм алғанда, эштен

йөкмәткеһенә ярашлы 2 һәм телмәре буйынса 3-4 хатаһы булыу мөмкин. Грамоталылыҡ - 2 орфографик һәм 2 пунктуацион , йәки 1 орфографик һәм 3 пунктуацион , йә иһә 4 пунктуацион .
«3» билдәһе – теманан эш байтаҡ ситкә тайпылған, эштен йөкмәткеһе дөрөҫ , ләкин фактик хаталар байтаҡ, эҙмә-эҙлелек тулыһынса һаҡланмаған, эштен һүҙлеге ярлы , ҡулланған синтаксик конструкциялар бер төрлө, эштен стиле бик үк төҙөк түгел. Эштә йөкмәткеһе яғынан 4 һәм телмәре буйынса 5 хата булыуы мөмкин. Грамоталылыҡ - 4 орфографик һәм 4 пунктуацион , йәки 3 орфографик һәм 5 пунктуацион , йәки орфографик хатаһыҙ , 7 пунктуацион , шулай уҡ 4 грамматик хата булыуы мөмкин.
«2» билдәһе - эш теманы асмай, бик күп фактик хаталар ебәрелгән, эштен бөтә өлөшөндә лә фекерҙен эҙмә-эҙлелеге боҙолған, бәйләнеш юҡ, эш планға тура килмәй, эштен һүҙлеге ярлы , ул бер типтағы ҡыҫҡа һөйләмдәр менән генә яҙылған, текстын стиль берҙәмлеге боҙолған. Дөйөм алғанда эштен йөкмәткеһендә 6 һәм телмәрендә 7 хата ебәрелгән. Грамоталылыҡ – 7 орфографик һәм 7 пунктуацион , йәки 6 орфографик һәм 8 пунктуацион , йәки 6 орфографик һәм 9 пунктуацион , йә иһә 8 орфографик һәм 6 пунктуацион , шулай уҡ грамматик хата булырға мөмкин

Уҡытыу предметының материаль-техник тәьмин ителеше

Интернет селтәре.
«Социальная сеть работников образования nsportal.ru”
Интерактив таҡта.
Ноутбук.
1.Дөйөм белем биреү буйынса башҡорт мәктәптәренең башланғыс кластары өсөн башҡорт теле буйынса өлгө программалар. Р.Д. Салауатова. Өфө.Китап,2011.(Икенсе быуын стандарттары)
2. Сынбулатова Ф.Ш. Нурыева Р.Ф.Ғәлиуллина Г.Б. 1-4-се кластар өсөн диктанттар йыйынтығы һәм тикшереү эштәре. Башҡорт теле уҡытыусылары өсөн ҡулланмана.-“ Өфө. Китап,2011.

3. «Әлифба» һәм «Башҡорт теле»нән уҡыу программаларына нигеҙләнеп төҙөлгән. Башҡорт теле. Дөйөм белем биреү учреждениеларының 1-се класы өсөн дәреслек. Өфө: Китап, 2017.
4. Башҡорт теле. Дөйөм белем биреү учреждениларының 2-се класы өсөн дәреслек. Ике киҫәктә. Өфө; Китап,2017.
5.Башҡорт теле. Дөйөм белем биреү учреждениеларының 3-сө класы өсөн дәреслек. Ике киҫәктә. Өфө; Китап,2017.
4.Башҡорт теле. Дөйөм белем биреү учреждениеларының 4-се класы өсөн дәреслек. Ике киҫәктә. Өфө: Китап, 2017.

Өҫтәлмә әҙәбиәт

- Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағиҙәләрҙә. Әүбәкирова З.Ф.– Өфө, 2006.
- Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.
- Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.
- Журналдар: «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Аҡбуҙат», «Аманат».
- Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һынамыштар. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
- Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Методик ҡулланма. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.

Материал - техник ҡулланмалар

Федеральный Государственный Образовательный Стандарт
http: //standart, edu.ru/
Каталог образовательных ресурсов сети Интернет для школы
http:katalog/ iot.ru/
Персональ компьютер
Интерактив таҡта

Интернет ресурстар

Министерство образования и науки Российской Федерации
http: //mon.gov.ru/prov /fgos/
Федеральный Государственный Образовательный Стандарт
http: //standart, edu.ru/
Каталог образовательных ресурсов сети Интернет для школы
http:katalog/ iot.ru/